# Ҡалын тышлы дәфтәрҙәрҙән

Рәми Ғарипов 14 йәшенән тормошоноң һуңғы көнөнә тиклем көндәлек алып барған. Шағирыбыҙ көндәлектәре — әҙәбиәтебеҙ хазинаһы, донъя кимәлендә данларлыҡ уникаль күренеш. Әгәр студент сағынан башлап алып барған көндәлектәре ысын мәғәнәһендә көндәлек яҙмалары булһа, үҫмер саҡтағыларын проза әҫәрҙәре тип атарға мөмкин. Яҙмаларҙың күбеһе ҡараламанан матур итеп ҡалын тышлы дәфтәрҙәргә күсерелеп, биҙәлеп, айырым “китап” итеп яһалған: “Дон далаларына сәйәхәт”, “Пилот яҙмалары”, “Бала саҡтар”, “Йәшенле йәшлек йәки Уҡыу океаны”. Унан башҡа тиҫтәләгән цитаталар, төрлө әҫәрҙәрҙән өҙөктәр күсерелеп яҙылған дәфтәрҙәре һаҡланған.

Үҫмер Рәми үҙенең әҙәби киләсәгенә бик ентекле әҙерләнгән, дуҫтарынан да көндәлек алып барыуҙы талап иткән. Ул шул саҡта уҡ үҙен шәхес итеп тойған, һәр аҙымын, һәр көнөн анализлаған. Ә иң ҡыҙыҡлыһы — 16—17 йәшендә алып барған яҙмаларында ул үҙен Вәхит Ғәлимов исемле әҙәби герой итеп һүрәтләй һәм үҙенә ситтән ҡарау мөмкинлеген аса. Ыңғай әҙәби герой итеп тасуирлағас, үҙенә талап уғата көсәйә бит!..

Рәми Ғарипов яҙмаларының һаҡланыуына һәм беҙҙе ҡыуандырыуына шағирҙың ҡатыны Надежда Васильевна Ғариповаға тулыһынса бурыслыбыҙ. Халҡыбыҙ өсөн иҫ китмәле ҙур эш эшләгәнегеҙ өсөн ҙур рәхмәт һеҙгә, Надежда Васильевна!

Әлеге көндә Н.В.Ғарипова “Диалог культур” йәмғәт фонды менән берлектә үҫмер Рәмиҙең көндәлектәрен нәшер итергә ярҙам итә. 1947—1948 йылдарҙа Арҡауылдан Өфөгә килеп интернатта уҡый башлауын, бер төркөм интернат балаларының 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы эҙҙәре буйлап Дон яҡтарына сәйәхәтен тасуирлаған үҫмер көндәлектәре “Киләсәккә юл ярам” китабында нәшер ителде. Был китаптың сығымдарының ҙур өлөшөн республикаға изге эштәре менән билдәле Хәмзә Хажи үҙ өҫтөнә алды.

1948 йылдан башлап Рәми аэроклубта шөғөлләнә һәм был турала бик ентекле, әҙәби проза итеп “Пилот яҙмалары” тигән ике ҡулъяҙма китап ижад итә. Уларҙы бергә туплаған “Пилот яҙмалары” китабы ла донъя күрҙе. Уны сығарыуға “Вилли Окслер” нәшриәте директоры Вил Ғәйнетдинов күп көс һалды.

1949 йылдан башлап Әҙәбиәт институтына уҡырға ингәнгә тиклемге осорҙо тасуирлаған әҙәби әҫәрҙәре бер нисә ҡулъяҙма китапта һаҡланған. Шағирыбыҙҙың юбилейына “Мобильные системы — Поволжье” асыҡ акционерҙар йәмғиәте ярҙамында ошо ҡулъяҙма китаптарының яртыһын үҙ эсенә туплаған “Уҡыу океаны” исемле китабы донъя күрәсәк.

Бөгөн иһә “Ватандаш” уҡыусыларына үҫмер Рәмиҙең тәүге проза әҫәрен — бығаса бер ҡайҙа ла нәшер ителмәгән, Ғ.Рәмил псевдонимы менән 1946 йылда яҙылған “Бала саҡтар” документаль повесын тәҡдим итәбеҙ.

*Зөһрә БУРАҠАЕВА.*

# БАЛА САҠТАР

1




Күңелле ине ул саҡтар!

Ул ваҡыттарҙы һаман һағынып хәтерләйем. Улар хәҙер миңә төштә күргән кеүек кенәләр.

Беҙ, күсмә халыҡ кеүек, бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөнөк. Былай йөрөүҙәр күңелле булһа ла, үҙебеҙҙең тыуған ауыл бик һағындыра торғайны.

Бына шулай беҙ ғаиләбеҙ менән Урал тауҙары итәгендә урынлашҡан кескәй генә Мейәс ҡалаһында торҙоҡ. Артыҡ ҙур булмаһа ла, күңелле ине.

Минең атайым унда Ҡыҙыл Армия сафында хеҙмәт итә торғайны. Буласаҡ ҡыҙылармеецтар әҙерләйҙәр ине. Атайым ял көндәрендә сборҙар булғанда мине үҙҙәренең казармаларына алып бара.

Мин ошонда барырға ғәҙәтләнеп киттем. Бейек кенә, ҡыҙыл кирбестән һалынған матур, эсе йыйнаҡ, стеналарына төрлө рәсемдәр ҡуйылған, шат күңелле һалдаттар өсөн матур йыйыштырылған казармалар мине үҙенә тартып тора ине.

Ләкин күп ваҡыт үҙем генә барғанда башына ҡыҙыл йондоҙло шлем кейгән, ҡулына винтовка тотҡан ҡапка төбөндә тороусы ҡыҙылармеец керетмәй. Мин илап ҡайтып китәм. Ә атай, икенсе унда барып йөрөмә, тип асыулана торғайны.

Алты йәш тирәһендә атайым мине уҡырға өйрәтә башланы. Үҙем дә китап уҡығанды тыңларға ярата инем. Атай өйрәтә, ә мин бик тырышам, уҡыйым, яҙам.

— Ҙур үҫкәс инженер булам, — тим. Дәфтәр биттәренә һүрәттәр эшләйем, насар сыҡһа, йыртып алып, бесәй ҡойроғона тағып уйнайым.

Күп тә үтмәй атайым миңә магазиндан китап тотҡан минең хәтле генә балалар төшөрөлгән йәшел тышлы китап алып бирҙе.



*Рәми Ғариповтың атаһы, әсәһе һәм Урал кустыһы. 1938 йылдар тирәһе*

Уҡырға бик яратҡанға күрә, уны көндәр буйы йотлоғоп уҡый торғайным. Шунан һуң миңә атайым матур-матур журналдар алдыра башланы. Шулай итеп, мин уҡырға өйрәнеп киттем.

Беҙ унда бер ҡыш торҙоҡ. Яҙға ҡарай, атайҙың хеҙмәте тулғас, үҙебеҙҙең тыуған ауылға ҡайтырға булдыҡ.

Минең бик ҡайтҡы килә ине. Көн дә иртә менән торғас, атайҙан ҡайтыуҙы һорап ҡаңғыртып бөтөрәм. Сөнки үҙемдең иптәштәремде онотманым һәм уларҙы бик һағынғайным. Шулай уҡ улар менән бергә уйнағы, ат булышып йөрөгө килде, үҙемдең туғандарҙы ла бик ныҡ һағындым. Ҡасан ҡайтабыҙ инде, тигән уй башымдан сыҡманы...

Шулай итеп, көндәр бер-бер артлы үтеп торҙо. Көн төндө ҡыуып, төн көндө ҡыуып, береһен икенсеһе баҫтыра. Һалҡын буранлы ҡыш та артта ҡалды. Хәҙер инде ҡояш нурҙарында ялтырап тамсылар аға, яҙ елдәре хөкөм һөрә.

Бына минең түҙемһеҙлек менән һағынып көткән көндәр яҡынлашты. Беҙ ҡайтырға йыйына башланыҡ.

Ул ваҡытта ҡояш яҡшы ғына ҡарай башлаһа ла, ҡар иремәгәйне әле. Шуға күрә беҙгә станцияға хәтле ат менән санала барырға тура килде.

Бына бер көндө ғәҙәттән тыш иртә тороп, йыуынып ашанғас, беҙҙе алырға ат та килеп етте. Ниндәй ҙур шатлыҡ!

Кейенеп тышҡа сыҡтыҡ. Яҙҙың саф һауаһы беҙҙе иркәләп ҡосағына алды. Мине иркәм (ул яҡта бәләкәй туғандарын шулай йөрөтәләр. — **З.Б.**) менән, өшөмәһен тип, ныҡ кейендереп, өҫтөбөҙгә ҙур ҡалын юрған ябып, санаға ултырттылар. Эш бөттө. Сана ҡуҙғалды, аттар ҡош кеүек осто.

Көн матур ине. Елһеҙ. Тып-тын. Тик сана табандарының ғына таҡмаҡлап шығырҙауы ишетелә. Мин был тирбәлеп барыуҙан ойоп киткәнмен...

Уянып китһәм, хәҙер инде атта түгел, ә поезда тирбәләм. Иң башта аптырашта ҡалдым, ә һуңынан төшөндөм. Хәҙер мин иркен тәҙрәнән ҡарап барам. Поезд, оҙон йылан кеүек, урман һәм тауҙар араһынан рельстар өҫтөнән шыуыша. Ҙур-ҙур ҡарт ҡайындар, йәшел энәле ҡарағайҙар беҙгә баш эйеп, иҫәнләшеп ҡала.

Бына икенсе көндө үҙебеҙҙең станцияла төшөп, беҙҙең яҡҡа барыусының арттағы ике атына тейәлеп ҡайтып киттек.

Ҡайтып кергәндә беҙҙе ауылдың киске тәбиғәте ҡаршы алды.

2

Бына хәҙер мин үҙебеҙҙең тыуған ауылыбыҙҙа. Иптәштәрем янында. Теләгәнсә уйнайым, көләм. Бында рәхәт. Сөнки беҙ Мейәстә торғанда, унда урыҫтар ине. Етмәһә, мин русса “әпәй-тоҙлоҡ” ҡына беләм. Бер генә Петя тигән иптәшем бар ине.

Унда саҡта мин уйнарға сыҡҡанда, атайҙың ҡыҙыл йондоҙло шлемын кейеп, йондоҙ башлы ҡайышын быуып, малайҙарҙың күҙен ҡыҙҙырып йөрөр булдым. Ә урыҫ малайҙары минән ҡайышты һәм шлемдағы ҡыҙыл йондоҙҙо һорап ҡаңғырта. Йә булмаһа, ҡар тауҙан шыуҙырмайҙар, үҙҙәре менән уйнатмайҙар ине. Шулай уҡ унда һыу инергә беҙҙеке кеүек Үҙәндәре лә юҡ, ә тик бер тәрән, сөскөл күл генә.

Бына оҙаҡламай йылытты. Хәҙер уҫал ҡыштың кәрәген биреп, йылы, матур, көләс яҙ килеп етте. Ҡарҙар иреп, боҙҙар китте. Яландар һәм хәтфә туғайҙар, тау биттәре йәшел үлән менән ҡапланды. Ҡара, күкһел урмандар йәшел япраҡтарына төрөндө. Алыҫ көньяҡтан илдән-илгә, алыҫтарҙан-алыҫтарға донъя гиҙеп сәйәхәт итеп йөрөгән дуҫтарыбыҙ — ҡоштар ҙа ҡайтты. Улар талпынып-талпынып, ҡанаттарын ҡағып, көньяҡтан килтергән матур көй-йырҙарын концерт итеп ишеттерә. Донъя йөҙөнөң яҡтыртҡысы һәм йылытҡысы — ҡояш та йылы нурҙарын донъя йөҙөнә һибә.

Бына йәй ҙә етте. Ҡояш тағы ла ныҕыраҡ ҡыҙҙыра. Йәйге ошо матур көндәрҙә мин иптәштәрем менән болонлоҡҡа бесән сапҡан ергә барабыҙ. Таяҡтарҙы ат итеп, һыбай менеп саптырып йөрөйбөҙ.

Беҙҙең ауыл тау башына һалынып, уның аҫтынан талғын ғына, бормалана-бормалана Йүрүҙән аға. Беҙ шунда көндәр буйы уйнайбыҙ. Уйнап арығас, йәшел үлән өҫтөндә аунап ял итәбеҙ. Йә булмаһа, бейек яр башына ултырып ҡармаҡ һалабыҙ. Ныҡ эҫеткәндә, һыуға төшөп, сәғәттәр буйы шаулашып, көлөшөп, күлдәк-ыштандар менән селбәрәләр һөҙәбеҙ. Унан һуң эргәләге ереклеккә кереп, төрлө уйындар уйнайбыҙ. Уйнап асыҡҡас ҡына, өйгә саптырышып ҡайтабыҙ.

Күңелле бәләкәй саҡтар!

3

Көндәр бер-бер артлы үтә торҙо. Хатта беҙгә көн етмәй ҡала ине.

Көндәрҙең береһендә мин бик асығып, ғәҙәтем буйынса, төшкә ашарға ҡайттым. Бәләкәй тәҙрәне асып өйгә керҙем. Керһәм, ни күҙем менән күрәйем... Күршеләрҙең ҙур, ҡара, оҙон ҡойроҡло, уҫал, хәйләкәр ата бесәйе миңә ҡалдырылған ашты рәхәтләнеп кенә ашап ултыра. Ни эшләргә? Минең бик асыу килде. Сөнки мин иртә менән ашамайынса сығып киткәйнем. Абыйымдарға барып, уның менән икәүләп ҡарлуғас оялары ҡарарға ашыҡҡайныҡ. Беҙ ҡайтҡанда, төш етеп, бик асыҡҡайным. Нишләргә?..

Аптырап торманым, шунда ятҡан утын ағасын алдым да теге бур бесәйҙең “иманын уҡыттым”.

— Мә, урлашып йөрө икенсе!

Был бесәйҙе ҡайҙа ҡуйырға белмәй йөрөгәндә, ҡапыл кемдер ишек шаҡыны. Минең бәхеткә, ишек бикле ине. Арлы-бирле ҡарап ебәрһәм, тәҙрәгә ҡапланып иптәшем тора. Ә мин нишләргә белмәйенсә, бесәйҙе “йыназаһын уҡып” карауат аҫтына тыҡтым. Был бур бесәй уларҙыҡы ине, әлбиттә. Ул быларҙың барыһын да күреп торған икән.

Йәшереп тораһы юҡ инде. Был бесәйҙе ямғыр яуып үткәндән һуң оло юлда йыйылып ятҡан батҡаҡлыҡта иҫке сабатаға егеп, сабата эсенә тупраҡ, таш-фәлән һалып тарттырып уйнай инек. Ҡайһы ваҡыттарҙа уны беҙҙең Алмаз тигән этебеҙ менән талаштыра, йә булмаһа, “противогаз” тип, башына ойоҡ кейҙереп уйнай торғайныҡ. Ә хәҙер ул юҡ инде. Шунан бирле йәки шунан башлап беҙҙең дуҫлыҡ өҙөлдө. Беҙ ике дуҫ араһында кескенә булһа ла дошманлыҡ тыуҙы. Үс алыу барҙы.

Шулай итеп, бер көндө иптәшем (хәҙергә иптәш түгел әле) сыҡҡанымды көтөп кенә торған да, мин улар яғынан үтеп барғанда, бер ярыҡ таба китеге менән башыма тамға һалып, бесәйенең үсен ҡайтарҙы...

Был таба киҫәге минең баштың түбәһенә тейеп, итен уйып алғайны, бик нык ҡананы ла. Оҙаҡ ваҡыт йөрөгәс кенә бөттө. (Хәҙер ҙә уның эҙе бар).

Минең бик асыу килде. Миңә лә үсте ҡайтарырға кәрәк. Бер көндө йәйә эшләп алдым да, өй башына менеп, иптәшемдең беҙҙең яҡтан үткәнен көтә башланым. Уларҙың яғына ҡарап ебәргәйнем, баҡсаларынан бер көтөү кәзәләр ҡыуып алып сығып бара. Ҡулында ун икенән үрелгән дүрт быуынлы сыбыртҡыһы ла бар. Баҡсаларынан кәзәләрҙе пыр туҙҙырып, беҙҙең яҡҡа килтерә. Нишләргә, ҡурҡтым да, шатландым да... йөрәк дөп-дөп тибә...

— Әһә, киләңме әле?! — тип эстән генә өндәшеп ҡуйҙым. Ә ул килде лә:

— Баҡсағыҙға кәзәләр кергән, — тине.

Мин тиҙ генә йәйәне алдым да керешен тарттым... Минең уҡ тегенең уң яҡ аяғына барып төштө.

Их, нишләргә? Үҙем ҡурҡам, ҡалтыранам...

Бына бер заман ҡулына сыбыртҡы тотоп тегенең атаһы килә! Ҡасырға урын юҡ. Тиҙ генә төштөм дә урамдағы кесерткән араһына боҫтом. Иптәшем мине күреп торған икән. Атаһы бик уҫал кеше. Миңә ике тапҡыр сыбыртҡы менән тамыҙҙы. Уға ла эләкте...

Был дошманлыҡ оҙаҡҡа барманы. Беҙ тағы ла яҡын дуҫтар! Бәләкәй саҡта ундай ғына хәлдәр була инде!

Бына бер көндө иптәшем беҙгә килде, икәүләп күлгә киттек. Бөгөнгә беҙ — ҡараҡтар. Иван бабайҙың күлгә батырған йүкәләрен тикшерәбеҙ. Түңгәктәр аша һикерешә-һикерешә барҙыҡ.

— Бар, һалабаш бәйләнгән бағананы ысҡындыр, — тине дуҫым.

— Юҡ, һин бар, — тинем мин. — Мин үрәнмәгәм (өйрәнмәгәнмен. — **З.Б.**).

— Ну, ярар! — тине ул.

Кейемдәрен систе лә күлгә кисеп кереп китте.

— У-у-у! Батам, — тине, — тубыҡтан кире баттым, таяҡ ташла! — тигәнгә, таяҡ һондом.

Бер һалабашты сығарҙыҡ.

— Уһу-у! Әллә нимәләр аяҡты тешләй, — тине лә, сыҡты. Сыҡһа, береһе ботонда, береһе ултырышында, ике һөлөк йымылдап тора.

— И-и-и! Тиҙерәк ал! — тип ҡысҡырып ебәрҙем.

— Ҡурҡам шул, оһо, ауырттыра, — тигәс, мин таяҡ алдым да, һыпырып төшөрҙөм. Ярай, ныҡ йәбешмәгән әле.



Йүкәләрҙе тиҙ-тиҙ генә һыҙырып алдыҡ та, кисләһен әле, тип, яр ситенә ултырып, оҙон итеп көтөүсе сыбыртҡыһы ишә башланыҡ. Оҙон итеп иштек. Ҡалманы бер ер — йүкә лайлаһына буялып бөттөк. Ҡулдарҙы йыуҙыҡ та әкрен генә атлап көтөү яғына киттек.

Ҡояш инде төшлөктө уҙып, ауыша башлағайны.

— А-һа-һа! Был бик ауыр икән, — тип, сыбыртҡыһын миңә бирҙе дуҫым. Әйтһәң дә, бик ауыр икән!

Китеп бара инек, ҡаршыға бер ҙур тәлмәрйен килеп сығып, алдыбыҙҙа һикергеләп йөрөй башланы. Был ҡәһәр һуҡҡаны ҡаңғыртты ла, бер аҙ барһаҡ, тағы ла килеп сыға. Аптырағас былай тинем:

— Ахыры, Иван бабай беҙҙең йүкә алғанды белә инде. Был тәлмәрйен, моғайын, шуны һөйөнсөләп йөрөйҙөр, — тинем.

Көтөү янына барҙыҡ. Кәзәләр беренсе булып ҡайтырға йүнәлде. Бына бер бик ҙур кәзә, имсәктәренә яңы модалы ыштан кейҙерелгән. Ике бәрәсе инәләрен имә алмағанға асыуланып эргәһендә һикергеләп йөрөй. Етмәһә, бер иптәш табып алғандар, уныһы ла эйәргән.

Беҙ бер ҙә ҡыҙыҡ тапмағас, шул тәкәне баҫтырырға керештек. Иптәшемә, ахыры, оҡшап төштө. Сыбыртҡы менән шартлатып ҡыуабыҙ. Арыныҡ. Бына көтөү ҡайтырға ҡуҙғалды. Ҡояш тауҙар артына йәшеренергә булды. Түбәнгә табан тәгәрәй башланы. Ҡыҙыл нурҙарын бөтә ергә һаран ғына төшөрөп, донъяны ҡыҙыл төҫкә мансыны. Күләгәләр ҙурайҙы. Көтөү менән беҙ ҙә ҡайтып киттек. Көн кисләне.

Шулай итеп, көндәр үтте лә үтте. Күп елдәр иҫте. Иртән ҡояш сыға ла, көнө буйы көлөп тора, тағы ла ҡыҙарып таң атҡансы күкһел тауҙар артында оялсан килендәй йәшенеп тора. Тағы ла сыға...

Бына күңелһеҙ йырҙарын йырлап, әсе, сирҡаныс ямғырҙарын яуҙырып, ерҙәрҙе, һыуҙарҙы туңдырып көҙ ҙә килде. Үләндәр һарғайып, ҡоштар киткәс, ерҙәр туңғас, тәбиғәтте тағы матурлап ҡар яуғанын шатланып ҡаршы алыу — быныһы бигерәк күңелле! Һәр бала сана, саңғы алып,

тауҙа шыуабыҙ. Шулай көндәр үтте. Мин дә үҫә төштөм. Тағы яҙ етте.

Бөтөн ер тәбиғәт моңона сумды. Халҡым да ҡыҙыу эш — яҙғы сәсеүгә төштө. Мин дә тик торманым, үҙемдең мәшәҡәттәр менән булдым. Үҙемсә һуҡаланым.

Бер матур көн ине. Иртә менән абыйҙарға киттем. Улар тәмләп кенә сәй эсеп ултыра. Мин дә ултырып эстем дә, абый менән бергә үҙебеҙҙең шөғөлгә сыҡтыҡ. Баҡсаның бәләкәй ҡапҡаһынан инеп ҡойма янында ятҡан тасты алдыҡ: һөйәк йыйырға киттек.

Был һөйәкте беҙ үтелгә алып барып, Хизбулла ҡартҡа тапшырып, унан аҡса, төрлө нәмәләр — ваҡ ҡына йондоҙҙар, галстуктар, ҡәләм, перо һәм башҡа әйберҙәр алабыҙ. Был һөйәктәр, тимерҙәр нәмәгә китә торғандыр — унылын белмәйем инде.

Ситән башында торған бер ат башын алып, ситән буйына түгелгән һөйәктәрҙе йыйҙыҡ та, тағы баҡса буйлап эҙләнергә керештек.

Ҡапыл көн үҙгәрҙе. Көнбайыштан ҡара болот күтәрелде, ваҡтары ҡушылып, һаман ҙурая, ҡарая барып, тамам һалмағайып, ямғыр күҙҙәре төшә башланы. Ҡояш болот пәрҙәләре араһына инеп юғалды. Бына шабырлап ямғыр яуа башланы. Беҙ шунда ла үҙебеҙҙең эште ташламаныҡ. Һаман да дауам иттек. Өшөтә лә башланы. Һөйәге лә табылмай, исмаһам...

Бына ямғыр тыма, һирәгәйгән болот пәрҙәләрен йыртып ҡояш та йылмая башланы. Тауҙан алып йылғаға тиклем йәшел, зәңгәр, ҡыҙыл, ал төҫтәр сығарып, Салауат күпере дуғаланып тора.

Ә беҙ һаман эштә! Лас-лос бысраҡ тупраҡтар араһынан бүләктәр эҙләп, алтын эҙләгән шикелле, тупраҡ аҡтарабыҙ.

Аҙаҡ килеп, һөйәк табылмағас, ҡапҡа янына килдек тә элек йыйғандары янына яңыларын бушатып, тоҡҡа тултырҙыҡ. Мунса тимерҙәрен дә алып, табыштарҙы тапшырырға Хизбулла ҡартҡа йүнәлдек. Ә былар өсөн инде беҙ ҙур зарплата аласаҡбыҙ.

Ярай, барҙыҡ. Бабай өйҙә юҡ икән, көтә башланыҡ. Бабай тиҙерәк килдениһә, беҙҙең эш китә инде, тинем. Тағы берәй нәмә өҫтәлһә, бик яҡшы булыр ине, тип абыйға әйттем дә, өйгә йүгерҙем. Ҡайттым да дөбөр-шатыр өй башына менеп киттем. Арлы-бирле ҡараным, бер иҫке самауырҙан башҡа (иҫке тип, уның бороно ғына юҡ ине) бер нәмә лә тапмағас, шуны алып төшөп йүгерҙем. Ҡапҡа төптәрендә бабайҙы осраттым да:

— Һаумы, бабай, — тинем.

— Һаубыҙ. Нишләп былай ҡабаланып йөрөйһөң әле? — тине.

— Бына һиңә бүләк килтерҙем, — тинем.

— Ярай әләйһәң. Әйҙә киттек.

Келәт янына барҙыҡ. Унда абый мине көтөп ултыра. Шулай итеп, самауырҙы, һөйәктәрҙе, мунса тимерҙәрен бабайға тапшырҙыҡ та, хаҡ алырға өйөнә керҙек. Беҙ ишек төбөндә тороп ҡалдыҡ. Бабай счетын алды ла иҫәпләй башланы. Икебеҙгә ун бишәр тин аҡса алдыҡ та, сығып киттек. Бабай беҙҙе ишек төбөндә оҙатып ҡалды. Беҙ шатлана-

шатлана туп-тура лавкаға йүгерҙек. Абый төрлө һүрәтле китаптар алды, ә мин биш тингә бер ҡағыҙға төрөп кәнфиттәр алып, ҡайтып киттек. Кис етте. Айырылыштыҡ.

Шулай итеп, беҙ сауҙагәр ҙә булып йөрөнөк.

Күңелле саҡтар!

Ун биш тингә самауыр һатып йөрөгән саҡтар!

Шулай итеп, тағы көҙ етте. Мине ауылдағы башланғыс мәктәпкә уҡырға бирҙеләр. Электән уҡый белгәнгә, бик еңел булды. 1-се кластан алып тырышып уҡый башланым. Хәҙер инде беҙ уҡыусы. Берберебеҙ менән татыу октябряттар. Хужа Насретдин холҡо минән китте. Уҡыу йылдарым башланды.

5

Йылдар үтте.

Атай колхоз председателе булып эшләне. Унан ауыл Советы председателе булды, район Советының хәрби бүлегендә эшләне. Был осорҙа ғаиләбеҙ менән район үҙәгендә торҙоҡ. Унан йәнә үҙебеҙҙең тыуған ауылға ҡайтып, атай тағы колхоз председателе булып эшләй башланы.

Бына 1941 йыл килеп етте. Йәйҙең матур ваҡыттарында район үҙәгендә һабан туйҙары була торғайны. Быйыл да шуны һағынып көттөк. Бына көткән көн килде. 22 июндә колхоздың нәҫел айғырын егеп, һабантуйға киттек.

Шундай матур иртә ине. Таң һыҙылып килә. Беҙ кырандасҡа ултырғанбыҙ, шәп ат беҙҙе осороп алып бара. Таң турғайҙары һайрап күңел биреп тора.

Уйһыулыҡтарҙы, соҡорҙарҙы, Үҙән буйҙарын күкһел томан ҡаплаған. Тик Ҡаратау урмандары, тауҙары күгәрешеп, томандан бейек булып тора. Киң юлдар буйлап атҡа тейәлгән шат йөҙлө халыҡ район үҙәгенә йүнәлгән. Байраҡтар тағылған автомашиналар бер туҡтауһыҙ үтеп тора. Районға хәтле һуҙылған был ташлы юл бер узловой станцияға оҡшап киткән.

Бер ауылға еткәс, ҡояш сыҡты. Көтөү яңы ҡырға сығып бара. Һәр ауылда ла шул уҡ хәл. Шау-шыу...

Халыҡ көтөүе ҡорт кеүек ҡайнап, ҡыҙа башлағанда, беҙ район үҙәгенә барып индек.

Байрам бик күңелле үтте. Ҡояш бөтәһенең дә арҡаһынан һөйөп торҙо. Мин дә тик торманым, иге-сиге булмаған диңгеҙ кеүек халыҡ араһында орсоҡ кеүек әйләнгеләп йөрөнөм. Ҡайһы урында ат сабыштыралар, ҡайһы урында көрәшәләр, бейейҙәр...

Бик эҫе булғанлыҡтан, күләгәлә торҙом да, һыу инергә киттем. Унда элекке иптәштәрҙе күреп, бик оҙаҡ йөрөнөк. Тағы килеп атайҙарҙы көскә эҙләп таптым. Уйындар кискә тиклем һуҙылды.

Кис тә уйындарҙың тәьҫире бөтмәгәйне әле. Урамда йәштәр йырлашып уҙа. Унда-бында гармун тауыштары ишетелә.

Беҙ элекке фатирға төшкәйнек. Ашап-эскәс, өй эсе шығырым кеше булғанға һәм эҫегә түҙмәй, тышҡа сыҡтым да кырандас өҫтөнә йоҡларға яттым. Бик оҙаҡ йоҡлап булманы. Байрамда булған төрлө ваҡиғалар бер-бер артлы, иҫкән елдәр кеүек баштан үтте. Оҙаҡ ятҡас ҡына йоҡлап китеп, таңға табан өшөп уяндым. Бишмәтемде ябынып яттым. Оҙаҡ та үтмәй көнсығышта ҡыҙарып таң яҡтырҙы. Халыҡ тора башланы. Беҙ ҙә тороп, иртәнге сәй эстек тә, ат егеп, көтөү менән бергә сығып киттек. Тағы ла халыҡ оло юлға һыймай ҡара яу төҫлө ағыла.

Атай үҙенең эштәре менән район үҙәгендә тороп ҡалды. Атты мин тотоп ултырам. Кырандастың алғы тәгәрмәстәренә күҙ эйәрмәй әйләнәләр, көрән айғыр ҙа бөҙрә ялын елберләтеп, йылдам юртып бара. Үҙәнде аша сыҡҡанда борамға сирут көтөп тормайынса, кисеүҙән сығып киттек, Коммуна ауылы ла артта ҡалды. Төшкә ҡайтып еттек. Ҡайтһаҡ, ни булды... Бөтөн халыҡтың төҫө ҡасҡан. Ауыл Советы йорто янында ҡайғылы митинг бара.

— Герман һуғыш асҡан... Илебеҙгә һиҙҙермәҫтән баҫып инә башлаған, — тигән өҙөк-өҙөк шомло тауыштар... Дошмандан һүнмәҫ үс алыу һәр кешенең башына, хатта беҙгә, ялан аяҡлы малайҙарға ла, электр тогы кеүек тәьҫир итте. Бөтөн халыҡтың күҙҙәрендә осҡон сатҡылары ялтланы. Барыһы бер уйға, бер теләккә килде. Йәш егеттәр үҙҙәренең илен һаҡлауҙа бурыстарын үтәү тураһында уйланы...

Кискә атай ҙа ҡайтты. Ул бик борсоулы ине. Күҙҙәрендә дошманға әйтеп бөтә алмаҫлыҡ асыу, ут сатҡылары яна. Ул ҙур тәжрибәле хәрби кеше, үҙенең ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн ғәскәри хәрби хеҙмәттә үткәргән, тормоштоң әсе-сөсөһөн татыған кеше, илен һаҡларға ул иң беренсе китергә тейешле, тип һанай инем. Шулай булды ла. Бер нисә көн үткәс, беҙҙең ауылда төрлө хәрби уйындар ойошторолдо. Уның башында минең атай — коммунист тора ине.

Күп тә үтмәне, атайым, мәктәп уҡытыусыһы һәм тағы бер нисә кеше беренсе булып Ҡыҙыл Армияға алынды. Атайым киткәнгә тиклем үҙенең эшендә ныҡ эшләне.

Киткән саҡта, ауыл Советы эргәһендә митинг яһап, доклад һөйләп: “Аҡтыҡ ҡаным ҡалғансы көрәшермен!”, тип һүҙ биргән. Халыҡ уны оҙатып ҡалған...

Аһ... минең йөрәгем әрней шуға... үкереп илап тороп ҡалғам, исмаһам, атай, минең өсөн дә, фашистың кәрәген бир, — тип тә әйтә алмағам... Мин атайымды бик ярата инем. Бик һағынам.

Беҙ уның менән нисек көрән айғырға ултырып колхоз ҡырҙарында, дәртле колхозсылар янында, таборҙарҙа йөрөнөк!.. Атайым уларға бүләктәр алып бара торғайны. Ирҙәр менән күңелле һөйләшеп, тәмәке тарталар, ә мин ҡосағыма сәскәләр йыям...

Күңелле ине ул саҡтар!

Ләкин бына фашист эттәре был күңеллелеккә аяҡ салды, боҙҙо... Ләғнәт уҡыйым мин уларға! Кәрәк булһа, мин дә китер инем... Бик ҙур суҡмар ҙа эшләп ҡуйҙым...

## 6

Хәҙер миңә лә элекке кеүек сабатаға бесәй егеп уйнап йөрөргә тура килмәне. Бәлки ҡулымдан килгән эштәрҙе башҡарырға тура килде.

Бына ураҡ ваҡыты етте. Ҡайһы берҙә баҫыуға барам. Шәп кенә итеп ураҡ ура беләм, ул да файҙа.

Баҡсалағы эштәр тик беҙҙең өҫтә. Ҡый үләндәрҙе фашисты ҡырған кеүек ҡырып ташлайбыҙ, бәрәңге күмәбеҙ һәм башҡа йомоштар ҙа табылып ҡына тора. Етешеп кенә тор!

Бына көҙ етте. Көндәр һыуыта башланы. Бәрәңге өлгөрҙө. Бәрәңге ҡаҙыу беҙҙең өсөн бер көрәш булып тора... Үҙебеҙҙекен ҡаҙып бөткәс, туған әбейҙәребеҙгә барып бәрәңге алышабыҙ, ул да эш.

Бер көндө шулай әбейҙәргә барҙым да эшкә керештек. Әбейем көрәк менән аҡтара, ә мин йыуан-йыуан, һимеҙ бәрәңгеләрҙе биҙрәгә тултырып, сүпләп йөрөйөм. Үҙ-ара һөйләшәбеҙ.

Бына бер ҙур һимеҙ бәрәңге килеп сыҡты. Биш-алты имсәге лә бар.

— Бына, — тинем әбейгә, бәрәңгене күрһәтеп, — ниндәй ҙур!

Әбейем тотоп ҡараны ла:

— Бына баштары һиңә ҡарап, көлөп тора, — ти.

— Эйе! Бына был яғы һиңә ҡараған, — тинем мин.

Әбейем аҡтара-аҡтара һөйләй:

— Әле, балам, һин быны әйтәһең... Беҙ теге иҫке өйҙә торғанда, бәрәңге ҡаҙғанда бик ҙур — баштан да ҙуры килеп сыҡты. Аптыраныҡ, аҙаҡ үлсәп ҡараныҡ, 2 кила булды, — тине.

*Рәми Урал һәм Рауил кустылары менән*



Шулай ваҡыт уҙа торҙо. Һорауҙар артынан һорауҙар тыуа.

— Элек ниңә бәрәңге ултыртмағандар, ултыртһалар ҙа, бик аҙ? — тинем.

— Эйе шул, элек бик ултыртмай торғайнылар, — тине әбейем.

Бына төш тә етте. Аҙаҡҡы ҡалған түтәлдәрҙе сыҡтыҡ та, төшкө ашарға индек.

Бер-ике сәғәт ҡаҙған бәрәңгеләрҙе баҙға ташы-

ныҡ. Көн эҫе ине. Шунан һуң һыу буйына йүгерҙем. Оҙон-оҙаҡ һыу индек. Кәмәлә йөрөнөк...

Был йылғала бер нисә йыл элек зәңгәр һыуҙар өҫтөнән сәйәхәттә йөрөгәйнем... Был турала ла яҙып уҙайым әле.

Бәләкәй саҡ бәләкәй саҡ инде...

Бер матур көндө һыу буйына килдем. Бында ҡыш көнө аттар эсерә торған бәләкәйерәк, ташландыҡ ағас ялғаш бар ине. Мин, алйот, шуға ултыр ҙа аҡ та кит...

Үрҙә яҙып уҙғанса, шул Хужа Насретдиндән кәм булмағам инде. Бер ағынға төшкәс, карабымды тыңлатыуы хәлдән килмәй. "Нишләргә?" тигән киҫкен уй башҡа килде. Бороп ҡарайым, юҡ... булмай, һаман мине алыҫҡа тарта. Хәлдән килмәгәс, Туҡайҙың хәйләкәр төлкөһө баҡсаға кереп, буйы етмәгәс: "Емештәр өлгөрмәгән әле, ҡуйырһың эсте боҙоп..." — тигән кеүек, мин дә батырлыҡҡа һалышып:

— Ну, ярай, әйҙә, мин ниндәй батыр, — тип аға ғына бирҙем...

Үҙән бормалы бит ул.

Бик күп аҡһам да, ауылдан алыҫ түгел әле.

Аръяҡтағы малайҙар мине күреп ғәжәпкә ҡалды.

— Был ниндәй ҡурҡмаған малай... — тигән өҙөк-өҙөк тауыштары ҡолаҡҡа салынды.

Минең турала һүҙ барыуын ишеткәс, бигерәк тә батырланып киттем булһа кәрәк.

Үҙән тағы уратып, ауылыбыҙға табан ағышын йүнәлтә, үҙебеҙҙең тау аҫтына бәрелә.

— Ах... шайтан алғыры... иҫнәтә... йоҡо килә башланы...

Ни булһа ла булыр, үҙемде аллаға тапшырҙым да, тоттом да яттым.

Шунда йоҡлап киткәнмен. Ағын һыу мине күлгә алып кергән дә, бер талға бәргән. Ҡурҡып уянып киттем.

— Ярай, — мин әйтәм, — ҡайғырып тормайым.

Сыҡтым да, яр буйлап әҙерәк барып яттым. Шунда тәмле йоҡлап киткәм...

Ҡалғанын белмәйем. Ағайымдар эҙләп алып ҡайтҡан...

Уйҙарым шул ергә еткәс, электр тогы тейгәндәй, дерт итеп ҡалдым. Тиҙерәк, шәп атлап ҡайтып киттем.

Уйҙар артынан уйҙар...

Бер ваҡыт кисен дә шулай оҙон юлдан ҡайтып килгәйнем. Шулар һаман иҫтә тора. Былай булды.

Июль айының һоҡландырғыс матур иртәһе ине. Тирә-яҡ тып-тын. Тик ҡатын-ҡыҙҙарҙың иртән тороп арлы-бирле йөрөүҙәре генә күҙгә салына.

Шуға ҡарамаҫтан, тороп, йыуынып, ашандым да китергә булдым. Еңелсә генә кейенеп сығып киттем. Инәйем ҡарап оҙатып ҡалды. Иркәләрем, йоҡлап, киткәнде абайламаны.

Шәп-шәп, йылдам аҙымдар менән юлды дауам иттем. Тыуған ауылым артта, алыҫта ҡалды инде. Уйланып барып, үткән ерҙәр һиҙелмәне лә.

Бына алда ҙур уйһыулыҡ. Алыҫта бормаланып-бормаланып киткән тауҙар һуҙыла. Улар алыҫтан күгәреп күренә. Уйһыулыкта ғына бер нәмә күренмәҫлек булып томан төшкән. Һалҡынса ғына йәйге иртәнең саф һауалы еле иркәләп биткә бәреләә. Ҡайҙалыр иртәнге тәбиғәт моңонда туғайлыҡты яңғыратып кәкүк саҡыра. Көнсығыш яҡ аллана. Инде ҡыҙыл нурҙарына мансылып ҡояш ҡалҡыр.

Тәбиғәт матур. Тирә-яҡлап йәшел хәтфә туғайҙар, ҡыуаҡлыҡтар, тулҡынланып ятҡан иген баҫыуҙары һуҙылып киткән. Ошо матур тәбиғәт баҡсаһы эсенән оҙон ҡара таҫма кеүек бормалы юлдар һуҙылған. Ошондай матурлыҡта үҙемде бер зәңгәр диңгеҙҙә барыусы яңғыҙ карап кеүек хис итәм. Бына тәбиғәт тағы ла алмашына, матурая. Көнсығыштағы күкһел тауҙар артынан ҡыҙарып миңә иптәшкә ҡояш та сыға.

Бигерәк күңелле шул саҡта! Бөтә нәмәләр ҡояштың яғымлы нурҙарына ҡойона. Аҡландағы төрлө матур сәскәләр баштарын күтәреп, ҡояшты ҡаршы ала. Ошо матур яландарҙа шыңғыратып салғы яныған тауыштар ишетелә. Ҡоштар ҙа улар менән ярыша-ярыша һайраша. Ошо салғы яныған тауыштарға, ҡоштар музыкаһына ҡушылып, саф күкрәктән һауа ярып, күңелдәрҙе нескәртерлек нәҙек кенә йыр тауышы сыға. Икенсе дәртле тауыштар ҡушылып, бөтөн ерҙе яңғыратып ебәрә. Ә яғымлы ҡояш үҙенең һөйкөмлө нурҙары менән уларҙың да, минең дә арҡанан һөйә.

Шулай итеп, күп кенә саҡырымдар һиҙелмәй ҙә үтте. Кескәй генә ауылдар артта ҡала барҙы. Алда тағы икенселәре күренә... Бер ни ҡәҙәр барғас, йәшел үлән өҫтөнә хәл йыйырға ултырҙым. Әҙерәк ҡапҡылап алғас, шунда рәхәтләнеп ойоп киттем һәм ниндәйҙер төштәр менән һаташа башланым.

Имештер, бер тау башында ултырам. Тирә-яҡ ялан. Бушлыҡ. Мин бер үҙем, яңғыҙ. Әйләнә-тирәмде һалдаттар уратып алған. Ҡурҡам... Шыптырлатып ямғыр яуа. Һыуыҡтан ҡалтыранам. Тәндәр эҫелеһыуыҡлы булып китә. Ҡапыл уянып киттем. Ямғыр яумай. Төш етеп бара. Мин ҡырмыҫҡа иләүе янына ятҡам булырға кәрәк. Өҫтөмдәге һоро, билен быуған һалдаттар улар икән! Бөтә ерҙе һырып алғандар... Нишләргә? Түҙеп булмай. Шундай ауырттырып тешләйҙәр. Бөтә ергә тулып бөткәндәр. Торҙом да тиҙ-тиҙ генә ҡағындым. Йәһәт ипләндем дә, был уҫал һалдаттар батшалығынан ҡасырға булдым. Ҡайҙа ул хәҙер ял итеү! Ниндәй булһа ла бер әжәлдән ҡасҡан кеүек, йүгерҙем генә...

Был “уҫал һалдаттар”ҙан мең-мең яфалар күреп, кискә табан ғына бабайҙарҙың өйөнә саҡ барып керҙем...

***

Бында бер аҙна самаһы торҙом. Марат менән балыҡҡа йөрөнөк. Бер көн шулай йылға буйына барҙыҡ та, һыу төшкәс, ҡармаҡ һалырға ултырҙыҡ.

Беҙ хәҙер балыҡсылар! Күңелле ул балыҡ тотоу!



— Бөгөн бер ҙә балыҡ эләкмәй! — тине Марат.

Шулай ултырғанда, ҡармағыма бик ҙур балыҡ эләкте, ахыры.

— Марат! Бында кил!

Марат килде.

— Бик ҙур балыҡ эләккән, — тинем һәм ҡармаҡ һабын тарттым. Һуп итеп килеп сыҡты ла... Мараттың битенә килеп бәрелде. Их! Иҫке сабата булған. Тәгәрәп ятып көлдөк. Хатта Марат яр башынан аунап төштө.

Шулай, бөгөн табышһыҙ ҡалдыҡ. Бер нисә кис ҡунғас, мин ҡайтырға булдым.

Әбей әйтә:

— Ҡайҙа, балам, тоғоңа иркәләреңә күстәнәс һалайым.

— Юҡ, юҡ, әбей! Мин күстәнәстәр һалғам инде, — тинем. Тәки һалдыртманым.

Бер тоҡ китап йөкләп, иртә менән ҡайтырға сыҡтым. Марат мине ауыл осона тиклем оҙатып барҙы. Ҡулдарыбыҙҙы ҡыҫыштыҡ.

— Хуш бул, хуш.

Айырылыштыҡ...

***

Юлда бер ат осраны. Шул ат менән күп кенә килдем. Ул бер ауылда туҡтап ҡалғас, йәйәүләп киттем. Кискә табан арып ҡайтып индем.

Шул ваҡиғалар хәҙер иҫкә килеп төштө.

Шулай итеп, мин бәләкәй саҡтарҙа сауҙагәр ҙә, сәйәхәтсе лә... барыһы ла, барыһы ла булдым.

Бына шул инде минең баштарҙан үткән тарих.

Барыһы ла, барыһы ла хәтеремдә. Ҡыҙыҡлы ул бәләкәй ваҡытта!

Бар ине саҡтар!<br>
Таяҡтарҙы ат итеп,<br>
Ун биш тингә самауыр һатып,<br>
Купец булып йөрөгән саҡтар!!!<br>
Үтте дауыллы осорҙар!

*Ғинуар, 1946 йыл.*